# Урал батыр

## Башҡорт халыҡ эпосы

### 5-се бүлек

Бер ҡыҙ йүгереп килгән, ти,
Берәү килде, тигән, ти;
Һомай шундуҡ таныған:
Ул килгән Урал булған,
Тик Уралға әйтмәгән;
Урал, ҡыҙҙы күрһә лә,
Һомайҙыр тип белмәгән,
Һомай яҡынлаған һуң,
Урал күҙен һалған, ти:
Уның усма шәлкемдәй,
Енсегене ҡапларҙай,
Кәйтән менән биҙәлгән.
Сәс толомо һалынған;
Оҙон керпеге үтә
Ҡара күҙе текәлгән;
Уйнап торған ҡыйғас ҡаш
Күҙ өҫтөндә йылмайған;
Тертәйешкән ҡалҡыу түш
Күҙ алдында тулҡынған;
Бал ҡортондай нәҙек бил.
Борғоланып уйнаған;
Гүйә күптәнге танышы,
Көмөштәй саф тауышлы;
Уйнап-көлөп һүҙ ҡушҡан,
Ҡыҙҙы күргәс, Урал да,
Ни әйтергә белмәгән,
Үҙе күргән - Һомай тип,

Уйына ла килмәгән.
Был ҡыҙ оҙаҡ тормаған,
Уралды үҙ артынан
Һарайына ымлаған.
Урал һарайға ингәс,
Иҫән-һаулыҡ һорағас,
Йәнә ҡайҙа булғанын,
Юлда ниҙәр күргәнен
Барын теҙеп һөйләгәс,
Уралға күҙ ташлаған,
Былай тип һүҙ башлаған:
"Йә, егетем, төҫ-башың
Алыҫ илдән күренә,
Беҙҙең яҡҡа килеүҙән
Теләгең барлыҡ беленә,
Һүҙең һөйлә, тыңлайым,
Ҡулдан килһә, йомошоңа
Ярҙамсыңдан булайым".
Урал: "Үҙем йәп-йәш булһам да,
Биш ил барын белдем мин:
Береһендә үҙем тыуҙым,
Икеһен йөрөп күрҙем мин,
Ҡалған тағы икәүһен
Күрергә тип сыҡтым мин.
Ҡайҙа ғына барһаң да,
Кемде генә күрһәң дә,
Береһе үҙен баш, тиә,
Икенсеһе баш эйә,
Көслө көсһөҙҙө ейә,
Теләгәнсә ҡан ҡоя.
Исеме бар донъяла,
Үҙе күҙгә күренмәҫ;
Берәү уға кәр ҡылмаҫ,
Аяғы-ҡулы һис уның

Балға тотоп йонсомаҫ;
Арыслан менән һунарҙа
Үҙе йәнлек юлламаҫ;
Үҙ теләген табырға
Бер ҙә юлдаш эҙләмәҫ -
Шундай яуыз Үлем бар,
Шунан алыр ҡоном бар;
Үлемде табып үлтереп,
Ил ҡотҡарыр уйым бар.
Һунарлаған сағымда,
Ҡулға төшкән бер ҡоштан,
Һеҙҙең илдә Үлемдән
Ҡотолорға юл бар, тип,
Ишеткәйнем мин йәштән".
Һомай: "Был донъяла үлмәҫкә,
Ҡара ергә кермәҫкә -
Минең илдә булмаған,
Үҙен берәү күрмәгән
Дейеү батша биләгән
Йәншишмәнең һыуы бар.
Уны барып алырға,
Һиңә ярҙам бирергә,
Теләген бар ҡылырға
Минең һиңә шартым бар
Ҡайҙа булһа барырһың,
Үҙең уйлап бағырһың;
Йылан илен үткән ир,
Уңдан һулға сыҡҡан ир,
Үҙең юлын табырһың.
Минең илдә булмаған,
Ишетеп тә күрмәгән,
Бөтә донъя ҡош төҫөн
Үҙ өҫтөндә биҙәгән
Бер ҡош эҙләп тапһаң һин,

Шуны алып ҡайтһаң һин,
Минән ярҙам күрерһең
Шишмәнән һыу алырһың,
Теләгәнең табырһың"
Урал: "Мин алыҫтан ил йөрөп,
Яман-яҡшыны күреп,
Үлемде табып үлтереп,
Ҡотҡарырға кешене,
Тындырырға барыны
Уйлап сыҡкан батырмын,
Һиңә ҡошон табайым,
Үҙеңдән ярҙам алайым,
Бүләгеңә шарт итеп,
Мин дә бер һүҙ әйтәйем:
Алтын һалыр йөгөм юҡ,
Ынйы тағыр кемем юҡ,
Яҡшынан бүтән уйым юҡ;
Үлемдән бүтән берәүҙән
Юллай торған дауым юҡ.
Ил теләген алырға,
Илде байман ҡылырға,
Үлемгә ҡаршы барырға,
Уны тар-мар итергә;
Серәшеп яу асҡанда,
Үлем юлын баҫҡанда,
Ҡан илаған кешенең
Күҙ йәшене һөртөрҙәй,
Миңә юлдаш булырҙай,
Яуҙа ҡорҙаш булырҙай
Бүләк бир, тип һорайым.
Ул бүләгең ни булыр? -
Әйтсе, белеп торайым".
Һомай: "Утҡа төшһә, янмаҫтай,
Һыуға төшһә, батмаҫтай,

Ел дә ҡыуып етмәҫтәй,
Тауҙан-таштан өркмәҫтәй,
Ир-егеттән бүтәнде
Үҙеңә тиң күрмәҫтәй;
Типһә, тау-таш сорғотоп,
Сапһа, дингеҙ ярырҙай,
Ауырлыҡта, тарлыҡта
Һиңә юлдаш булырҙай,
Күктә тыуып, күктә үҫеп,
Ерҙә тоҡом йәймәгән,
Әзрәҡәнең дейеүе
Мең йыл ҡыуып тотмаған,
Әсәйемдән бирелгән,
Үҙем һөйгән егеткә
Бирә торған бүләгем -
Аҡбуҙ толпар бирәйем.
Йөҙөн һис тут алмаҫтай,
Һис берәү кәр ҡылмаҫтай,
Утҡа ҡаршы - ут булыр,
Һыуға ҡаршы - һыу булыр,
Ен-дейеүҙең барыһын
Үлемендәй ҡурҡытыр,
Ҡуй-һарыҡтай өркөтөр
Булат ҡылыс бирәйем", -
Тигәс, Урал күнгән,ти,
Ҡыҙ теләген эҙләргә
Сығып китмәк булған, ти.
Урал ҡунаҡ булған, ти,
Бер нисә көн торған, ти;
Һомай үҙен әйтмәгән
Шүлгән бикле тимәгән,
Урал тағы һиҙмәгән.
Урал торған, ти, таң менән,
Битен йыуған, ти, һыу менән,

Бер табында ултырып,
Тамаҡланған, ти, ҡыҙ менән.
Урал юлға сыҡҡан, ти,
Таяғын ат иткән, ти.
Бик күп көндәр киткән, ти.
Бара торғас, бер саҡта
Тау ураҡкан бер яҡта:
Һайыҫҡан да, ҡоҙғон да
Йән барлығын һиҙмәгән,
Һис бер кеше булмаған,
Дейеүе дә ул ергә
Килеп аяҡ баҫмаған
Үркәс-үркәс ҡаяһы,
Башына күҙең һалһаң,
Юғары торор болоттан,
Бөтә йәмде үҙендә
Һаҡлар элек-электән -
Шундай бер тау күргән, ти;
Болот ярып, үрмәләп,
Тау башына менгән, ти.
Тирә-яҡҡа күҙ һалып,
Оҙаҡ ҡарап торған, ти:
Алыҫтан күҙгә салынған,
Йондоҙҙай булып сағылған
Бер яҡтылыҡ күргән,ти,
Шуға тоҫҡап киткән, ти.
Барып етеп ҡараһа,
Әйләндереп күҙ һалһа:
Таш урынына көмөштән
Сите, төбө биҙәлгән,
Буйындағы сәскә лә
Ҡаты елгә борсолмай,
Шаҙраланып өҫтәре,
Күҙ сағылыр төҫтәре,

Ел дә тейеп тулҡынмай,
Ҡояш нуры төшкәндә,
Ем-ем иткән ынйылай
Бер һылыу күл күргән, ти.
Ошо күлдең өҫтөндә
Тирәләй ҡош йыйналған,
Бөтә төҫкә биҙәлгән
Бер һылыу ҡош йөҙгәнен
Урал айыра күргән, ти.
Ҡош һиҙмәҫтән шул ерҙә
Ҡош янына барған,ти.
Төҫөн-башын ҡараған,
Таяғы менән арбаған,
Һомай әйткән ҡош был, тип,
Урал шундуҡ уйлаған.
Ҡош Уралдан шикләнмәй,
Осорға ла уҡталмай,
Уға ҡарай килгән, ти;
Урал, йола белмәгәс,
Ҡошҡа туры уҡталғас,
Ҡош Уралдан һиҫкәнгән,
Осмаҡ булып ынтылған.
Урал барып тотҡан һуң,
Тотоп ҡулға алған һуң,
Тағы тапты дошман, тип,
Ҡош ҡайғырып уйланған.
Урал, ҡошто күтәреп,
Ҡырға сығып барғанда,
Теләгем булды тигәндә,
Ҡошо телгә килгән дә:
"Ай, егетем, туҡта әле,
Миңә ысынын әйт әле:
Дейеүме һин, енме һин?
Кешеме һин, кем һуң һин?"-

Тигән һүҙҙе ишеткәс,
Ҡош кешеләй һөйләшкәс,
Урал таңға ҡалған,ти.
Бер аҙ барғас бер ерҙә,
Шишмә буйы туғайҙа,
Ҡоштоң затын кемлеген
Урал һорай башлаған.
Ҡош та бер аҙ уйланып,
Үҙ алдына һөйләнеп,
Теклəп ҡарап торған да:
"Күҙең йомоп, күрмәй тор,
Ҡулың алып ҡанаттан,
Һис еремдән тотмай тор",-
Тигәс, Урал уйланған:
"Был ҡош осһа, артынан
Ҡарсығa булып ҡыуырһың,
Һыуға сумһа, артынан
Суртан булып сумырһың",-
Тип таяҡҡа ымлаған,
Ҡош әйткәнде тыңлаған.
"Егет, күҙең ас инде,
Әйтер һүҙең әйт инде",-
Тигәс, Урал ҡараһа:
Ҡуңыр һылыу, ҡыйғас ҡаш,
Эйәк-бите уйылған,
Һул битенең уртаһы
Күҙ ҡаралай миңләнгән;
Йүрмә-йүрмә ишелеп,
Ике яҡлап-сикәләп
Тамсы гөлдәй елберәр,
Иң башынан һалыныр
Оҙон сәсен матурлап,
Әсмә яһап төшөргән;
Оҙон керпектәре аша

Ҡара күҙен йылмайтып;
Бит уймағын уйнатып,
Көләс йөҙөн көлдөрөп,
Дертләп торған күкрәген
Уралғараҡ ыҡлатып,
Һөйләп киткән шулай тип:
"Ай, егетем, һин былай
Килеп нисек юлыҡтың?
Бында килеп сығырға
Ни бәләгә тарыҡтың?
Ай, егетем, бел шуны:
Ҡарап көлгән йөҙөм дә,
Әйтеп торған һүҙем дә -
Сер сисеү ул, егетем.
Быға саҡлы мин былай
Һиндәй егет күрмәнем,
Дейеү килмәҫ урынға
Һин килер тип белмәнем,
Һыуҙа балыҡ булырҙай,
Күктә йондоҙ булырҙай
Ҡулда көсөм бар ине,
Китер юлым бар ине.
Һине күргәс, бар уйым, -
Ел тараткан болоттай,
Ҡаса торған бар юлым,-
Йүгереп бөткән һуҡмаҡтай,
Күҙ алдымдан киттеләр,
Юйылышып бөттөләр.
Мин бер саҡта ҡыҙ инем,
Иркә үҫкән буҙ инем, -
Дейеү мине урланы,
Кейәүгә биреп зурланы.
Кейәүем егет-ир ине,
Бергә оҙаҡ торманы:

Көтмәгәндә юғалды,
Йөрәгемде ҡайғы алды.
Дейеүҙәрҙән ҡастым мин;
Илгә ҡайтһам, атама,
Бөтә тыуған илемә
Яу килер, тип ҡурҡтым мин.
Дейеү килеп алыр тип,
Тағы ҡайғы һалыр тип,
Һис донъяла булмаған,
Кеше төҫөн белмәгән
Бер ҡош булып остом мин;
Һис бер кеше тапмаҫлыҡ,
Килеп аяҡ баҫмаҫлыҡ
Ошо күлгә төштөм мин", -
Тигән һүҙен ишеткәс,
Ҡыҙҙың серен төшөнгәс,
Урал уйын һөйләгән,
Тик бер ҡыҙға ҡош эҙләп
Сыҡҡан уйын әйтмәгән.
"Юлымдан, ахыры, уңманым:
Эҙләп килгән ҡошомдо
Был күлдә лә тапманым",-
Тиеп Урал уйлаған.
Тағы ары китергә,
Мораҙына етергә,
Ҡыҙға ярҙам итергә
Теләгәнен һөйләгән.
"Егет, тыңла, һүҙемде,
Асыҡ күрҙең йөҙөмдө,
Айһылыу тигән атым бар.
Илде тотҡан атам бар,
Күктең Айы - әсәм бар,
Һөйгәнемә бирерҙәй
Һарысай тигән атым бар, -

Һыу теләһәң, һыу табыр,
Яуҙа юлдашың булыр.
Егет, һүҙем тыңласы,
Һүҙем ҡырын һалмасы:
Һин эҙләгән ул ҡошто
Был тирәнән тапмаҫһың.
Атайым ил гиҙгән ул,
Күк йөҙөндә осҡан ул,
Бөтә ерҙә булған ул,
Бар ҡоштарҙы күргән ул.
Атайымдан һорайыҡ -
Беҙҙең илгә барайыҡ,
Һин теләгән ул ҡошто
Шунда табып алайыҡ;
Мине дейеүҙән ҡотҡарһаң,
Теләгең үтәр атайым.
Беҙҙең илде хуп күрһәң,
Мине үҙеңә тиң күрһәң,
Әйҙә, беҙгә барайыҡ,
Икәү бергә булайыҡ,
Бергә ғүмер һөрәйек" -
"Ай, һылыу ҡыҙ, һылыу ҡыҙ,
Бүләгеңде алмайым,
Илеңә мин бармайым,
Ысынлап та ҡош булһаң,
Ҡыҙға юрый әйләнһәң,
Һине алып ҡайтайым,
Үҙем белгән һарайға
Һине илтеп бирәйем.
Унда барғас, һөйләрһең,
Үҙ теләгең әйтерһең:
Теләһәң, ҡош булырһың,
Теләһәң, ҡыҙ булырһың;
Һине улар хурлаһа,

Телəгəнеңде бирмəһə,
Ул саҡ һине яҡлармын,
Үҙ илеңə илтермен", -
Урал шулай тигəн, ти,
Ҡыҙ ҙа быға күнгəн, ти,
Яҡшылығын Уралдың
Тел төбөнəн белгəн, ти.
Ҡыҙ ҡош тунын кейгəн дə,
Бергə китмəк булған, ти.
Теге таяҡҡа менгəндəр,
Юлға сығып киткəндəр,
Тауҙар ашып үткəндəр,
Күҙ асып, күҙ йомғансы
Былар ҡайтып еткəндəр.
Ҡыҙҙар ҡаршы килгəндəр,
Ҡошто бары ҡосаҡлап,
"Айһылыу!" - тип алғандар.
Урал быны ишеткəс,
Аптыраған, таң ҡалған,
Айһылыу ҡош тунын һалған.
"Əйҙə, егет, керəйек,
Һинең ҡайтҡан һарайың,
Минең ҡайтыр һарайым,
Икеһе лə бер икəн", -
Тип Уралға əйткəн, ти.
Урал тағы нығыраҡ
Хайран булып ҡалған, ти.
"Һай, егетем, егетем,
Батыр-алып икəнһен,
Мин һораған ҡошомдо
Дейеүҙəн алып килгəнһең", -
Тигəс, Урал аптырап
Бөтə серҙе һөйлəгəн.
"Уны алған ул күлдə

Дейеү-маҙар күрмәнем,
Барған-йөрөгән юлымда
Һис ауырлыҡ тойманым.
Нисек анда икәнен,
Ҡош тунында йөрөгәнен,
Ҡайҙан аны белдең һин,
Миңә: "Эҙлә", тинең һин?" -
Тиеп Урал һораған.
"Дейеү нисек белмәне,
Киткәнеңде күрмәне?" -
Тип, Һомай Айһылыуға
Аптыраулы һүҙ ҡушҡас,
Айһылыу шунда һиҙгән, ти,
Апаһының яңылыш
Уйлағанын белгән, ти.
Дейеүҙәрҙән үҙенең
Ҡасып күлдә ятҡанын,
Урал барып шул күлдән
Уны эҙләп тапҡанын,
Барын теҙеп һөйләгән.
Атаһының һарайынан
Уны бераү белмәгән,
Һомай быны ишеткәс,
Уралдан сер тартмаған:
Үҙе Һомай икәнен,
Уралды яҡшы белгәнен
Барын һөйләп аңлатҡан,
Һомай шунда атаһын
Бүлмәһенә саҡыртҡан.
Самрау килеп ингән дә,
Айһылыуға күрешкән,
Күҙ йәш түгеп ҡыҙынан
Бөтә хәлен һорашҡан.
Айһылыу атаһына

Хәлен һөйләп таныткан.
Самрау тыңлап торған да,
Серҙе аңлап белгән дә,
Уртаға һалып үҙ уйын
Ҡалдырмайынса төйөн:
"Айһылыуҙың ҡайтканын,
Дейеүҙәрҙән ҡасҡанын,
Берәүгә лә әйтмәгеҙ,
Хәҙергә сер тотоғоҙ.
Дейеү белһә, яу асыр,
Һис уйламаç, ил басыр;
Айһылыу ҙа йонсоған,
Күп ҡайғынан борсолған,
Әсәһен дә һағынған.
Айға барһын ҡунаҡка,
Байман тапһын аулаҡта,
Саҡырырбыҙ кәрәктә", -
Тиеп һүҙен әйткән, ти,
Атаһының һүҙенә
Ҡыҙҙары ла күнгән, ти.
Һарайҙа ял иткәс тә,
Бер нисә көн үткәс тә,
Атаһы менән апаһы
Әсәһенән бирелгән
Айһылыуҙың бүләге -
Һары атын саҡыртҡан,
Айһылыуҙы бер төндә
Былар айға оҙатҡан.
Бер нисә көн Урал да
Бәçле ҡунаҡ булған да,
Берҙән-бер көн таң менән
Йоҡоһонан торған да,
Һомайҙы саҡырып алған, ти,
Әйтерен әйтә һалған, ти:

"Мин әле бик йәш саҡта,
Атам һине атҡанда,
Барыбыҙ ҙа һунар тип,
Һине һырып алғанда,
Муйыныңа ырмау һалғанда,
Йәнең алҡымға килгәндә,
Ысынлап та белепме,
Йән асыуҙан ҡурҡыпмы,
Һин телеңә килгәйнең,
Ҡотолорға Үлемдән
Йәншишмә бар тигәйнең,
Һинән шуны ишеткәс,
Үлемде тапһаҡ, тоторға,
Илдән башын юйырға,
Шишмәнән һыу алырға,
Мәңге йәшәһен донъя, тип,
Илгә һыуын бирергә
Тигән уйға килгәйнек,
Икәү юлға сыҡҡайныҡ.
Күп ер китеп, сер белгәс,
Юлды икәү бүлгәйнек,
Юл буйында ни барын
Һорашып та белгәйнек.
Ағам китте һул яҡҡа,
Мин тайпылып уң яҡҡа,
Айырылып киткәйнек.
Күп йыл йөрөнөм, ил күрҙем,
Әйткән һүҙең онотмай,
Һеҙҙең илгә боролдом, -
Илең аша уҙманым,
Бармайым, тип торманым,
Һарайығыҙ алдына
Арыҫланымды бәйләнем,
Һарайыңа ингәндә,

Уйым һөйләп үткәндә,

Арала һүҙ киткәндә,

Үҙ бауырың эҙләргә

Миңә йомош ҡушҡанда,

Һин бер бүләк әйткәйнең.

Мин эҙләгән Үлемдән

Һин әйткәйнең телеңдән:

"Ҡотолорға юл табып

Мин бирермен", - тигәйнең,

Аҙаҡ һүҙең әйт, һылыу,

Ни әйтерһен, - көтәйем,

Мин ишетеп китәйем", -

Тигән һүҙен ишеткәс,

Атаһына барған, ти,

Йәшермәйсе бер ниҙе,

Теҙеп әйтеп һалған, ти.

"Һөйһәң, ҡыҙым, барырһың,

Аҡбуҙатың бирерһең;

Яҡты донъя йөҙөндә

Рәхәт торорһоң, балам,

Уралдай уҡ батырға

Әсә булырһың, балам.

Урал батыр хаҡына

Шүлгәнде лә сығар һин,

Бөтә илде саҡыр һин,

Батыр ирҙе туйла һин,

Һис берәү ҙә ҡалмаһын -

Барын йыйып һыйла һин", -

Тигән һүҙен тыңлаған.

Атаһы уйын аңлаған,

Шүлгәнде лә сығарған,

Бөтә илде йыйнаған,

Алҡындырып һыйлаған.

Шүлгән, Урал - икәүһе,

Берен-бере табышҡас,
Көтмәгәндә осрашҡас,
Ике туған шатлығын,
Юлда күргән барыһын
Урал теҙеп һөйләгән.
Шүлгән тыңлап ултырған,
Барын уйлап уҙҙырған:
"Урал былай дан алһа,
Атама данлы ҡайтһа,
Батыр булып маҡталыр,
Бар эштә лә өҫ булыр,
Минең һүҙҙәр аҫ ҡалыр",-
Тип, эсенән көнләшкән.
Шуға күрә Уралға
Бар серен сисмәгән.
Әзрәҡәлә булғанын,
Бында ниңә килгәнен-
Береһен дә әйтмәгән.
Ул Уралды үлтереп,
Үҙе данлы ир булып,
Һомайҙы ла үҙе алып,
Аҡбуҙатҡа атланып,
Булат ҡылыс ҡулланып,
Дан алыуҙы уйлаған.
Шүлгән асыулы булғанын,
Һәр саҡ һалҡын йөрөгәнен,
Уның шомо барлығын
Урал ҙурға ҡуймаған:
"Тик ябыулы ятҡанға,
Уңайһыҙға ҡалғанға", -
Тиеп кенә уйлаған.
Бер саҡ Урал Шүлгәндең
Ҡомһарылып, ҡаш төйөп,
Ултырғанын күргән дә:

"Батыр иргә арыҫ та,
[Донъялағы ҡырыҫ та,]
Икәү бергә менгәшеп,
Бер-берене күҙләшеп,
Күләгәләй йөрөрҙәр,
Баҫмалатып килерҙәр,
Алмашлап тап булырҙар.
Батыр булған ир-егет
Еңмәҫ нәмә булырмы?
Батырмын тигән ир-егет
Яуызға юл ҡуйырмы?
Утҡа ҡаршы һыу булыр ул,
Яуға ҡаршы тау булыр;
Үҙенә түгел, барына
Ауырлыҡта юл булыр;
Батырҙан ил тарыҡмаҫ,
Батыр һис бер зарыҡмаҫ,
Яҡшылыҡтан ялыҡмаҫ,
Яуҙан да һис талыҡмаҫ.
Күккә менер баҫҡысһыҙ,
Ерҙе аҫыр асҡысһыҙ,
Яҡшынан эскәне - һыу булыр,
Ямандан эскәне - ыу булыр",-
Тигән Урал Шүлгәнгә,
Һомай, һаман ышанмай,
Ысын сергә төшөнмәй,
Ағай-эне икәүҙең
Ҡыланышын күҙәткән.
Алмаш-тилмәш улар мән
Һомай һәр саҡ һөйләшкән.
Бар йолаһын уларҙың
Һомай төпсөп һорашҡан.
Уралды Һомай күргәс тә,
Батырлығын белгәс тә,

Яҡшылығын һиҙгәс тә,
Уға күңел бәйләгән,
Ул Уралды һайлаған.
Шүлгән ҡомһоу йөрөгәнгә,
Һаман шиге булғанға,
Ике туған һөйләшеп,
Икәү-ара серләшеп
Ултырғанда, Шүлгәндең
Һытыҡ йөҙөн күргәнгә,
Һомай унан шикләнгән.
Урал ятһа йоҡларға,
Биш көн тотош йоҡлағас,
Шүлгәндән ҡыҙ шикләнгәс,
Ҡыҙҙар ҡуйған һаҡларға.
Шүлгән ятҡан бер яҡта,
Айырымланған торлаҡта.
Шүлгән уйы сыҡмаған:
Һомай һис юл ҡуймаған.
Шүлгән: "Һин күп ерҙә булғанһың,
Бик күп нәмә күргәнһең.
Батыр булып, дан алып,
Инде бында килгәнһең,
Самрауҙың иленә
Килеп аяҡ баҫҡанһың.
Инде нимә уйлайһың?
Беҙҙең теләк ошонда
Икәнен асыҡ белмәйһең.
Самрауға яу асайыҡ,
Аҡбуҙатын алайыҡ,
Беребеҙ таяҡ тотайыҡ,
Беребеҙ Аҡбуҙ менәйек,
Бөтә илдә баш булып,
Барыһыны мат ҡурып,
Көслө батша булайыҡ.

Һин таяғың бир миңә, -
Ошо илде ҡырайым,
Самрау ҡоштоң ҡыҙыны
Үҙемә тартып алайым,
Аҡбуҙатын менәйем;
Мин бит - туған ағайың,
Мин дә данлы булайым!"
Урал: "Былар һис тә кешегә
Бер яуызлыҡ итмәгән,
Үлтереп, ҡан ҡоймаған,
Кешегә дошман булмаған.
Беҙ икәүләп барайыҡ,
Дейеү илен алайыҡ,
Унда тотҡон булғандың
Барына юл асайыҡ.
Ҡыҙ алырға уйлаһаң,
Аҡбуҙатын һайлаһаң,
Ҡыҙы һөйһә, ҡыҙын ал,
Бүләк итһә, Буҙын ал.
Ҡыҙ алам, тип яу асып,
Үлемгә беҙ юл ҡуйып,
Бер ҙә юҡҡа ҡан ҡойоп,
Яуыз исем таҡмайыҡ,
Ҡан ҡойоусы даны алып,
Илгә яман ҡайтмайыҡ.
Әзрәҡәне еңәйек,
Шишмәнән һыу алайыҡ,
Үлгәнгә йән бирәйек,
Кешеләрҙе донъяла
Үлмәҫ йәндәр ҡылайыҡ", -
Тигәс, Шүлгән уйланған,
Төрлө юлдар һайлаған.